**Хоҙайым Һинән ярҙам һорайым**

Бәлә ҡазаларға урын бирмә, Хоҙай,
Булғанына бир Һин сабырлыҡ.
Гонаһтарҙан яралы йөрәгемә,
Бирсе, йәшәр өсөн көстәр табырлыҡ.

Гонаһтарым өсөн, мине ғәфү ит
Бар йәнем менән инанам Һиңә.
Барлыҡ өмөтөмдө бағлайым
Мул фатихаңды,бирһәң ине тип миңә.

Ярҙам ит Һин миңә Хоҙайым!
Ҡаршыңда һәр саҡ ихлас - саф булырға,
Ҡараңғылыҡтан мине  Һин сығарҙың,
Башҡалар алдында изге эштәр ҡылырға.

Һаулыҡ менән аҡыл да бир Һин миңә,
Аһ – зарымды еңеп сығырға.
Һинән генә үтенеп ярҙам һорайым,
Миңә көс бир, яман эштән йыраҡ торорға.

Васыятың Һинең, дәрт өҫтәй миңә,
Үҙ халҡыма Изге Һүҙеңде еткерергә.
Хоҙайым, Һиндә булған хаҡиҡәт,
Ярҙам итә, наҙанлыҡты еңергә.